МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ

БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

# Тәрбиәселәр өсөн консультация

## *Балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә әкиәт терапияһы алымдарын ҡулланыу*

Әҙерләне:

Ҡоломбәтова Ф.Ш.

## Балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә әкиәт терапияһы алымдарын ҡулланыу.

Баланың дөйөм үҫеше, фекерләү ҡеүәһе кимәле, уның телмәренең үҫешенә бәйле. Тимәк, баланың телмәрен үҫтереүгә бәләкәйҙән үк ҙур иғтибар бүлеү бик мөһим. Т.Д. Зинкевич-Евстигнееваның фекерләүенсә, әкиәт терапияһы йүнәлештәре был талапҡа тулыһынса тап килә. Әкиәт үҙ исеменән, башҡа кеше исеменән һөйләү, йөкмәткеһе буйынса фекер алышыу, күмәкләп һөйләү, түңәрәк буйлап һөйләү, әкиәт ижад итеү, ролдәргә бүлеп һөйләү – былар әкиәт терапияһының төп йүнәлештәре.

Был йүнәлештәрҙең береһендә – әкиәтте һөйләү һәм уның дауамын ижад итеү йүнәлешендә ентекләп туҡталайыҡ. Әкиәт терапияһы менән шөғөлләнеүҙең структураһы “әкиәткә инеү” ритуалынан , төп өлөштән һәм “әкиәткән сығыу” ритуалынан тора. Бындай структуралы шөғөлләнеүҙә балалар үҙҙәрен әкиәт донъяһына эләккәндәй хис итә.

Әкиәткә инеүҙе, мәҫәлән, ковер-самолетҡа ултырып сәйәхәт итеүҙән башларға була. Был мәлдә ҡоштар һайрауы тауышы, тәбиғәт тауышы фонограммаһын ҡулланыу бик отошло. Тылсымлы әкиәт иленә барып еткәс, балалар әкиәт геройҙары һүрәтләнгән башлыҡтар кейәләр һәм әкиәт башлана.

Шулай уҡ, әкиәткә инеүҙә “Юлға әҙерләнеү” уйынын ҡулланырға була. Тәрбиәсе балаларға: “Әкиәт иленә юлға сығыр өсөн беҙгә ныҡлап әҙерләнергә кәрәк, сөнки юлда төрлө хәлдәргә тарыуыбыҙ бар, шуға үҙебеҙ менән кәрәкле әйберҙәр алыр кәрәк. Күп әйбер ҙә ала алмайбыҙ, сҝнки юлда ауыр буласаҡ. Уйлағыҙ әле, балалар, ниндәй әйбер һәм ни өсөн кәрәк буласаҡ ул беҙгә юлда. Мәҫәлән, беҙгә бау кәрәк булыр. Ул йылға аша сыҡҡанда, тауға менгәндә ярҙам итәсәк. Бау менән дошманды бәйләргә була, уға кер элергә була”. Балалар берәй әйбер тәҡдим иткәндә, уны ҡулланыуҙың ҡс-биш вариантын әйтергә тейеш. Был уйын баланың күҙҙалыуын, һығымта яһяау һәләтен үҫтерә.

Шөғөлләнеүҙең төп өлөшөндә балалар бер-бер артлы әкиәттең өҙөгөн һөйләй. Төп өлөшөтө былай тип башларға мөмкин: “Балалар, һеҙ әкиәт иленең ҡапҡаһы төбөндә тораһығыҙ. Әкиәт иленең батшаһы әкиәт һөйләй белмәгәндәрҙе индермәҫкә ҡушҡан. Әйҙәгеҙ, түңәрәккә ултырайыҡ һәм бер-бер артлы батшаның яратҡан “Шалҡан” әкиәтен һөйләйек.”

Тәүге өҙөктө һөйләргә телмәре үҫешкән актив балаға бирергә кәрәк. Әкиәтте һөйләгәндән һуң, балалар уның дауамын ижад итә – мотлаҡ тамамлап ҡуйырға тейеш, сөнки кире осраҡта әкиәттең сикһеҙ дауам ителеүе бар.

Әкәиәт геройының төрлө сетерекле хәлдәргә ҡуйып, балаларға был хәлдән сығыу юлын эҙләү әкиәттең дауамын ижад иткәндә ярҙам итә. Баланың әкиәт геройының образына инеүҙә бик эффектлы алым. Шулай уҡ, әкиәт дауамының схема өлгөләре, йүнәлешле һорауҙар, әкиәт дауамының планын төҙөү – бик отошло алымдар. Һөйләп бөткәндән һуң балалар үҙҙәренең ижад иткән әкиәттең дауамын төрлө яҡлап баһа бирәләр.

“Әкиәттән сығыу” ритуалында балалар әкиәттән алынған яҡшылыҡты, аҡылды үҙҙәре менән алып, ҡайтырға сығалар. Ковер –самолетта килһәләр, уның менән ҡайталар, тылсымлы таяғы ярҙамында әкиәткә эләкһәләр, ошо тылсым таяғы кире ҡайтара.

Әкиәт терапияһының был йүнәлешен ҡулланыу балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә бик ҙур һөҙөмтәләр бирә. Балалар бер-береһен тыңлыарға, эҙмә-эҙлекле итеп тасуирлап һөйләргә өйрәнәләр, башҡорт өндәрен дөрөҫ әйтергә һәм телмәрҙе нығытырға өлгәшәләр. Башта балалар йүнәлешле һороуҙар, төрлө схемалар ярҙамында әкиәт ижад итһәләр, аҙаҡ улар күп осраҡта бер ниндәй ярҙамһыҙ бәләкәй әҫәр ижад итергә һәләтлеләр.

Әкиәт терапияһы алымдары баланың телмәрен, ижад итеү һәләтен үҫтерә, тасуири саралар аша (мимика, интонация, ым-ишара) образға инеү һәләтен формалаштыра, геройҙың эмоциональ торошон аңларға һәм тойорға, башҡа персонаждар менән ролле ғәмәлгә инергә өйрәтә.